*Раул БИКБАЕВ*

# ҠАНАТЛЫ БАБИЧ

1895 йыл Мөхәмәтзакир мулланың йортонда ҡот-ҡыуаныс менән башланып китә: ғинуарҙың икеһендә был йортта ир бала донъяға килә. Йөҙлөк менән тыуа был сабый. Яҙмыш уға якты донъяла, әйтерһең дә, тәүге һулыш алыуынан уҡ аҡ бәхеттәр юрап тора. Бәхет билдәһе булған йөҙлөк менән тыуған был балаға Шәйехзада тип исем ҡушалар.

Халыҡ тормошондағы бәхетле мәлдәр, йөҙ йылдарға бер була торған илаһи сәғәттәр! Тыныс ҡына таң ҡаршылаған Әсән ауылы ла, ап-аҡ бәҫкә күмелгән туғай-яландар ҙа, уйға сумған алыҫтағы Урал армыттары ла был илаһи таңда башҡорт еренә ниндәй оло бәхет килгәнен, милләттең күҙ ҡараһы, йөрәк парәһе, йәненең киҫәге буласаҡ аҫыл заттың тыуғанын белмәй әле.

1895 йылдың икенсе ғинуарында Әсән ауылында донъяға килгән ошо изге йән — башҡорттоң буласаҡ атаҡлы шағиры Шәйехзада Бабич үҙе лә арҙаҡлы, затлы нәҫелдән. Һүҙ бында ниндәйҙер байлыҡ йәки аҡһөйәклек тураһында бармай. Бабичтар ғүмер буйы тир түгеп, хәләл эш менән көн күргәндәр, илде-ерҙе ҡурсалап, быуын-быуын хәрби хеҙмәттә булғандар, дошманды ҡыуып, яу сапҡандар. Ҡулына ҡылыс тотоп ил һаҡлағандары ла, ҡулына ҡәләм алып илгә ғилем тараттҡандары ла күп булған уларҙың. Нисек кенә ғүмер кисермәһендәр, Бабичтар затлы нәҫелдән, күңелдәрендә һәр саҡ иман нуры, мәғрифәт яктылығы балҡып торған, ҡараштарынан миһырбанлыҡ, мөрәүәт бөркөлөп торған нәҫелдән. Был затлы нәҫелдең быуаттар төпкөлөнән башҡорт тупрағына тамырланып үҫкән шәжәрә ағасының бер тармағы, Бәбес олатай, уның улы Мөхтәр, уның улы Ишбулды, уның улы Ғилуан, уның улы Мөхәмәтзакир аша, Шәйехзадаға килеп тоташа. Бәбес олатаның улдары, ейәндәре, бүләрҙәре араһында поход есаулы ла, зауряд-есаул да, зауряд-сотник та, старшина ла, указлы муллалар ҙа булған. 1888 йылдан Әсән ауылында икенсе мәхәлләлә мулла булып торған Мөхәмәтзакир Бабичевтың атай-олатайҙары Тартыш, Ҡыйғаҙытамаҡ, Шаҙы ауылдарында ғүмер һөргән.

Әле сәңгелдәктә сағында уҡ Шәйехзаданың күңеленә китап нуры төшкән. Мөхәмәтзакир мулланың өйөндә китап һәр саҡ иң ҡәҙерле байлыҡ булған, әле 1905 йылға тиклем үк был йортҡа гәзит-журналдар килеп торған. Халыҡҡа аң-белем илтеүсе мулланы ҡотҡо таратыуҙа

ғәйепләп, бер заман указын тартып алалар. Ауылдаштарының бер төптән яҡлап сығыуынан һуң ғына кире ҡайтарып бирәләр.

Бәләкәстән үк уҡыуға зирәк булған Шәйехзаданың күңелендә тәбиғәттән бирелгән ижад дәрте китап нуры төшкән был йортта бик иртә уяна. Уның 1912 йылда төҙөлөп тә матбуғатҡа сыға алмай ҡалған ҡульяҙма йыйынтығы „Эй, китап“ тигән шиғыр менән асылып китә. „Эй, китап“ тигән инаныу менән ҡулына ҡәләм алған йәш шағирҙың тәүге әҫәрҙәрендә үк ғилемдең яҡтыһы менән наҙанлыҡтың ҡара күләгәһе килеп бәрелешә.

Тарихта әллә ниндәй тап килеүҙәр бар. Бына шуларҙың береһе: Аҡмулланың үлгән йылы — Бабич тыуған йыл. „Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!“ тип оран һалған Аҡмулла өсөн аң-белем ни тиклем ҡәҙерле булһа, Шәйехзада Бабич та шул уҡ дәрәжәлә мәғрифәткә табынып ижадҡа килде. Ул алдындағы хазинаның тамсыһын да ситкә ҡалдырмай, үҙенә тиклем тупланған барлыҡ байлыҡты күңеленә йыйып үҫте. Ғабдулла Туҡай уның өсөн иң оло остаз булды, татар шағиры тере сағында уҡ, 1911 йылда, башҡорт шиғриәтендә беренселәрҙән булып уға арнап шиғыр яҙҙы. Туҡай мәктәбе Бабичҡа шиғри оҫталыҡтың серҙәрен генә түгел, иң мөһиме, ижадтың маҡсатын, шағир һәм халыҡ тигән бәйләнештең тәрән мәғәнәһен аңларға өйрәтте. Ғүмере буйы башҡорт йырҙарына, ҡобайырҙарына, батырҙар тураһындағы әҫәрҙәргә һоҡланып йәшәү, уңайы тура килгән һайын уларҙы яҙып алырға тырышыу баштан уҡ уның ижадының мөһим тамырын, башҡорт фольклоры йолалары менән тығыҙ бәйләнешен билдәләне һәм уға үҙенсәлекле милли төҫ бирҙе.

Бабичтың башланғыс ижадынан уҡ уның киләсәк шиғриәтендә төп урын аласаҡ ике йүнәлештең — киҫкен уй-кисерештәрҙән яралған лириканың һәм үткер телле сатираның төп һыҙаттары асыҡ күренде.

„Күңел һыҙлай, һыҙлай, һыҙлауыҡ бар, ҡара көстәр уны тотҡанға“, — тип, шағир был донъянан йәм таба алмай өҙгөләнде, яҡты тормош эҙләп, ғаләмдәргә, ғәрше әғләләргә осто. Үҙенең талпыныуында „Ғәрше әғләләргә“ барып етә алмаһа ла, 1910 йылда Бабич тыуған ауылын, атаһы уҡытҡан мәҙрәсәне ташлап, Ҡаҙағстан яҡтарына сығып китте. Ул Кустанай яҡтарында, Турғай тирәһендәге Дүсәнбай ауылында Мортаза тигән ҡаҙаҡта ике йәй, 1910 һәм 1913 йылдарҙа, „мулдәкәлек итте“ — балалар уҡытты.

Икһеҙ-сикһеҙ далаларҙа йәшәгән, йыр-моңға бай, киң күңелле ҡаҙаҡ араһында ул замандарҙа күпме башҡорт әҙиптәре тормош юлында таяныс тапты. Аҡмулла, Буранғол, Ғафури, Юлтый, Йәнәби, Ҡудаш, Ғүмәр... Йыр-моңға ғашиҡ Шәйехзада ҡаҙаҡ сәхрәләрендә хайран шиғри донъяға килеп юлыға, аҡындарҙың әйтештәрен йотлоғоп тыңлай, кешеләрҙән ишеткән һәр бер тапҡыр һүҙҙе, оло бер байлыҡ тапҡандай, ҡыуана-ҡыуана дәфтәренә теркәп ҡуя. Шағирҙың тәүге ҡульяҙма йыйынтығына ингән шиғырҙарҙың да байтағы ошонда яҙыла.

Ләкин күгәреп ятҡан ҡаҙаҡ далаһы ла, ундағы халыҡ ижадының байлығы ла Шәйехзаданы оҙаҡ тынысландырып тора алманы. Уның ҡайҙалыр талпыныуы, нимәгәлер болоҡһоуы, бер аҙ ғына баҫылып тор-

ғандан һуң, яңынан тоҡанды. 1910 йылда „Зарланыу“ шиғырында йәш шағир былай тип яҙҙы:

Ҡайҙа юғалды яҙыҡһыҙ аҡ сағым, моңһоҙ сағым?
Үтте ғүмеремдең хәҙер бер йөҙ ҙә туҡһан айҙары.

Буйға еткәс тә, юғалттым мин ҡояшымды кинәт,
Тик был көндәрҙә түбәмдә тапҡа сумған ай йөрөй.

...Ә хәҙер күңелем минең боҙҙай туңып, таштай ҡата,
Сөнки йөрөгән ерҙәрем тик ҡап-ҡара Турғай ере.

Оло тормош юлына дәртләнеп аяҡ баҫҡан үҫмер ҡояшын юғалта... Хатта уның урынына ҡалған ай ҙа тапланып, бысранып бөткән. Әле генә йәшел хәтфә кеүек ятҡан Турғай далаһы ла бөгөн килеп ҡап-ҡара төҫтә. Ун алты йәше тулмаҫ борон уҡ яҙған шиғырҙарында (“Үтте ғүмеремдең хәҙер бер йөҙ ҙә туҡһан айҙары“) Бабич кеше күңелендәге тетрәүҙәрҙе бер нисә юлда ни тиклем тапҡыр аса алған.

Ҡояш эҙләүсе кеше... Ижад юлына Бабич бына шундай ынтылыштар менән аяҡ баҫты, һәм тәүге әҫәрҙәрен яҙғанда был ҡояшҡа ул бигерәк тә мохтаж булды. Ләкин уның „боҙҙай туңып, таштай ҡатып“ ғазапланыуҙары, ҡара реакция йылдарында әҙәбиәткә килеүсе күпселек башҡорт шағирҙарының уртаҡ һыҙланыуҙары кеүек, әле башлана ғына ине.

1911 йылдың көҙөндә Шәйехзада Бабич „Ғәлиә“ мәҙрәсәһенә уҡырға инде. Тиҙ арала бөтә Рәсәй мосолмандарына танылып өлгөргән был алдынғы мәҙрәсәлә күп кенә буласаҡ яҙыусылар, телселәр, фольклорсылар, журналистар, педагогтар тәрбиәләнде. Бында татарҙар, башҡорттар менән бергә ҡаҙаҡтар, үзбәктәр, төрөкмәндәр, әзербайжандар, ҡырғыҙҙар, черкестар, ҡырым татарҙары һәм башҡа милләт балалары бергә уҡыны. Улар араһында Шәйехзада иң танылған шәхестәрҙең береһенә әйләнде. Мәҙрәсәләге „Эләктергес“, „Парлак“ исемле ҡулъяҙма журнал сығарыуҙа, „Милли көй, сәхнә вә әҙәбиәт түңәрәге“нең концерттарын ойоштороуҙа йор һүҙле, музыкаль һәләтле Шәйехзада һәр саҡ алдан башлап йөрөй, үҙе шиғыр һөйләй, үҙе мандолинала оҫта уйнай, уйнағанда, тиҙ генә таҡмаҡ сығара һалып, ҡалын тауышы менән яңғыратып йырлап та ебәрә. Уның үткер күҙе, сәсән теле мәҙрәсә эсендә генә түгел, ҡалалағы ҡайһы бер хәлдәрҙе лә эләктереп алып, уларҙан әсе көлә. Ләкин был атаҡлы шәхес мәҙрәсәләге буш ваҡытын уйнап-көлөп кенә үткәрмәй. Уның һәр сәғәте иҫәпләнгән, оло маҡсаттарынан бер ҡасан да тайпылмай. Рус һәм татар яҙыусыларының байтаҡ әҫәрҙәрен тупланған яҡты китапхана уның яратҡан урынына әйләнә. 1915 йылдан был мәҙрәсәлә уҡытҡан Ғәлимйән Ибраһимов менән яҡындан аралашыу йәш шағирҙың ижади үҫеше өсөн айырыуса әһәмиәтле булды. Былар барыһы ла уның тиҙ өлгөрөүенә һәйбәт йоғонто яһаны.

Эйе, ғүмеренең үтә ҡыҫҡа булырын күңеле алдан һиҙгән кеүек, Бабич янып-талпынып йәшәне. Йәйге ял ваҡыттарында ла тыуған йортон-

да бер-ике көндән артыҡ торманы, әле Дүртөйлө, әле Бөрө яҡтарында халыҡ менән осрашып йөрөнө, әле яңынан ҡаҙаҡ далаларына сығып китте, әле башҡорт йәйләүҙәренә юл тотто. Тормошонда ла, ижадында ла шул уҡ ашҡыныу, шул уҡ ярһыу.

Ҡайҙа ғына булмаһын, Шәйехзада ижад өсөн янып, ғилемгә ынтылып, мәғрифәткә табынып йәшәй. Уның зиһен даирәһе, күңел офоҡтары һәр саҡ ғәйәт киң, маҡсат-идеалдары ғәйәт юғары. Ҡыҫҡа ғына ғүмерендә Бабич бөйөк шәхестәр менән яҡындан аралашып ҡала. Зәки Вәлиди, Ғәлимйән Ибраһимов, Дәрдмәнд, Мәжит Ғафури, Риза Фәхретдинов, Мөхәмәтша Буранғолов, Абдулҡадир Инан, Хәбибулла Ғәбитов, Зыя Камали, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Бағбостан, үзбәк шағиры Сулпан, ҡаҙаҡ әҙибе Мөхтәр Әүәзов, Муса Мортазин, Әмир Ҡарамышев, Шәриф Манатов, Юныс Бикбов — Шәйехзада Бабичҡа тормош юлында бына ниндәй кешеләр менән бергә булырға, уларҙың күңел яҡтылығын күрергә, үҙенең шиғри нурын улар менән бүлешергә тура килә. Ошо миҫал үҙе үк шағирҙың ниндәй бай рухи мөхиттә, көсөргәнешле, етеҙ ритмлы тормошта, замандың әллә күпме яҡтарын үҙ зиһене аша үткәреп йәшәүен бик яҡшы күрһәтә.

Талантлы Бабич, ҡанатлы Бабич... Юҡҡамы ни уның мандолинаһын да ҡанатлы тип йөрөткәндәр. „Әйҙә, күңелем, бында торма, күккә, күккә, күккә ос!“ — тип үрһәләнгән шағир. „Бер минутта ташты күңелем, бер минутта булды ут, берсә янды, берсә туңды, барыһы булды бер минут“ — Бабичтың шиғри темпераментын ғына түгел, барлыҡ йәшәү рәүешен, холоҡ-фиғелен ошонан тапҡырыраҡ асыусы һүҙҙәрҙе табыуы ҡыйын. Ер менән күк араһында өҙгөләнеү, ғәҙелһеҙ тормош ситлегендә тонсоғоу, туҡтауһыҙ киләсәккә атлығыу уның лирикаһындағы үҙәк кисерештәр.

Шағирҙың ижади үҫеше тигән үтә ҡатмарлы күренеш бер ҡасан да тигеҙ генә юлдан бармай. Ләкин һәр оло таланттың ижадында уның яңы биттәрен асыусы, яңы баҫҡысын билдәләүсе айырыуса әһәмиәтле әҫәрҙәр була. 1914 йылда яҙылған „Халҡым өсөн“ шиғыры Бабич ижадында бына шундай үҙәк әҫәрҙәрҙең береһе булды. Ошо шиғыр менән Бабич шиғриәтенең ысын өлгөрөп еткән осоро башланып китте. Шағирҙың эстетик ҡараштарын билдәләгән был әҫәрҙә ижадтың тамырҙары асыҡ күрһәтелгән. Тар ғына шәхси донъяһына бикләнеп үкһегән бәғзе шағирҙарға ҡаршы сыҡҡандай, Бабич „Халҡым өсөн!“ тигән ынтылышты байраҡ итеп күтәрҙе. Ул дан өсөн дә, алтын өсөн дә йырламаны, саф йөрәкле, дәртле, көләс кешеләрҙе — туған халҡын ҡурсалап көрәшәсәген белдерҙе:

Йәш сағым, алтын сағым,
Ялҡын сағым булһын фиҙа,
Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн.

Халыҡ Бабичтың ғүмер буйы табынасаҡ иң оло мөхәббәтенә әйләнде, һәм шағирҙың барлыҡ ҡалған кисерештәре ошо төп тойғо тирәһенә тупланды.

Был осорҙа Бабич ижадындағы йылдар ваҡыт теҙмәһе генә түгел, улар шағир ҡарашының киңәйеүен, ышаныстарының, инаныуының нығыны-

уын сағылдырған үҙенсәлекле баҫҡысты хәтерләтә. 1914 йылды шағир „Халҡым өсөн“ тигән изге теләк менән башлап ебәрһә, 1915 йылда замандаштарына „Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!“ тип оран һалды, иҙелгән халҡын „Әйҙә, милләт!“ тип алға саҡырҙы. 1916 йылда „Көтәм“, „Кем өсөн?“ кеүек билдәле шиғырҙарында Бабичтың был йүнәлеше тағы ла тормошсаныраҡ, поэтик үткерерәк төҫ алды.

Бабичтың 1914—1916 йылдарҙа ижад ителгән шиғырҙарында халыҡ төшөнсәһе, билдәле ижтимағи ерлек һәм һыҙаттар алып, асыҡлана килде. Шағирҙың поэтик оҫталығы етеҙ үҫеү менән бергә, уның донъяға ҡарашы ла үҙгәрешһеҙ ҡалманы. „Халҡым өсөн!“, „Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!“, „Әйҙә, милләт!“ кеүек, ижадының асылын нигеҙләгән шиғырҙарға халыҡ хәлен тормошсан күренештәрҙә һүрәтләү өҫтәлде.

1905—1907 йылдарҙағы революция тәьҫирендә иҙелгән милләттәр ер, ирек өсөн көрәшкә күтәрелде, уларҙың үҙаңы уянды. Милли үҙаңдың үҫеүе башҡорт халҡына, ер мәсьәләһе менән бергә, әсә телендә яҙма булдырыу, туған әҙәбиәтте үҫтереү кеүек мәҙәни-мәғрифәт мәсьәләләрен алғы планға ҡуйҙы. Рус самодержавиеһының миссионерлыҡ сәйәсәте һәм татар шовинистарының башҡорт халҡын инҡар итергә маташыуҙары милләттең үҫешенә аяҡ салыусы мәкерле көстәр ине. Башҡорт халҡы был йылдарҙа ошондай ике ут араһында йәшәне, шундай солғанышта ла үҙенең йөҙөн юғалтмаҫҡа тырышып, киләсәккә юлдар эҙләне.

Башҡорт яҙмышын шул осорҙа төрлөсә юраған бәхәстәргә, туған халҡы тураһында ваҡыты менән мыҫҡыллы һүҙ көрәштереүҙәргә Шәйехзада Бабич, әлбиттә, битараф ҡала алмай, „йөк ауыр, юл болғауыр булһа ла“, кешеләрҙе ошо тынсыу тормоштан сығыу юлдарын бергәләп эҙләргә саҡырҙы.

Туған халҡына мөхәббәте, уның киләсәгенә бағлаған өмөттәре Бабичтың 1916 йылда яҙылған „Көтәм“ исемле шиғырҙарындағы һәр юлға мөлдөрәмә тулған. Был әҫәр Бабич ижадында ғына түгел, барлыҡ башҡорт лирикаһындағы аҫыл үрнәктәрҙең береһе.

Башҡорт туғайҙарын, Яйыҡ, Һаҡмар буйҙарын гиҙгәндә, ҡурай моңдарын тыңлап, шағир күңеле әллә ҡайҙарға елкенә, ярлы ауылдарҙы күреп, бәғере өҙгөләнә.

„Килер микән аҡ көн беҙгә лә“ тип,
Уралҡайға ҡарап илайым“, —

ти ул.

Башҡорт халҡының героик эпостарында, ҡобайырҙарында, йырҙарында данланып, Башҡортостандың, халыҡ берҙәмлегенең символына әйләнгән, ауырлыҡтарҙа ла олпатлығын юғалтмаған Уралға Бабич торған һайын нығыраҡ таянды. Ошондай бәйләнеш арҡаһында „Көтәм“ шиғыры:

Күрәм, үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,
Урал ята әкрен, тын ғына.
Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,
Килә башлай йәнле уй ғына.

Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын,

Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын, —

тигән ҙур ышаныс менән тамамлана.

Был шиғырҙың башҡортса яҙылыуы ла уны милли әҙәбиәтебеҙҙең үҫеш юлында үҙенсә бер тарихи факт дәрәжәһенә күтәрә. Башҡорт телен танымаҫҡа тырышыусыларҙың тауышы әленән-әле ишетелеп торған саҡта уҡ Бабичтың туған телдә шиғыр яҙырға һәм уны матбуғатҡа тәҡдим итергә ҡыйыулығы етте. Ул үҙенең „Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!“ тигән тормош ҡағиҙәһенә тоғро булып, туған теленә матбуғатта тулы хоҡуҡ биреү өсөн тәүгеләрҙән булып эшкә тотонодо.

„Көтәм“, „Шатлыҡ көтәм“, „Көтәләр“ — был шиғырҙарҙың исемдәре үк Бабичтың ниндәй өмөттәр менән йәшәүенә миҫал. Унынсы йылдарҙағы башҡорт шиғриәтенең төп үҫеш йүнәлешен киләсәккә ошондай ышаныс, алға ынтылыш билдәләһә лә, шағирҙарға ҡатмарлы эҙләнеүҙәр аша үтергә тура килде.

Бабичтың „Үткән көндәр“ исемле шиғырында башҡорт шиғриәтенең шул осорҙағы рухи халәтен бик дөрөҫ кәүҙәләндергән ошондай юлдар бар:

Күңелем мең төрлөгә талпынғанда,
Көнөм бер төрлөгә янам мин.

Был юлдар тынсыу шарттарҙа шәхестең баш күтәреүен, ә тирә-яҡтағы таш ҡанундарҙың кешене ҡыҫыуын бик образлы күҙ алдына баҫтыра һәм Бабич ижадындағы романтизмдың үҙенсәлектәрен аңлауға ла ярҙам итә.

„Аҡтыҡ зарым“ шиғырындағы кисерештәргә иғтибар итәйек:

Нишләйем һуң? Әйтсе, зинһар: сәнселәйемме, нишләйем?
Сәнселеп, сәсрәп сығайыммы?.. Нишләһәм дә, эш ҡыйын.

Нишләйем һуң? Зәҡҡумлы хәсрәттәр менән күңелем яна,
Нишләйем һуң? Мәлғүн иблестәр төкөргән донъяға!

Икенсе бер урында шағир: „Пәйғәмбәрҙәр нәҫеле булған менән иблестән дә уҙған әҙәмдәр“, — тигәйне. Былар барыһы ла байтаҡ әҫәрҙәрендә тигеҙһеҙ тормошто ҡәһәрләү, унан баш тартып, ҡайҙалыр ҡасырға теләү, йәшәүҙән туйыу, хыялый донъяларҙы эҙләү кеүек мотивтарҙы ла тыуҙырҙы. Бабичтың ошондай тынғыһыҙ уйланыуҙарынан, һыҙылып яныуҙан тыуған шиғриәтендә башҡорт хыялыйҙарының быуат башындағы, бигерәк тә беренсе донъя һуғышы осорондағы эҙләнеүҙәре үҙенсәлекле сағылыш тапты.

Бабичтың күккә талпыныуы ла ғәҙәттәге романтик талпыныуға ғына ҡайтып ҡалманы. Күптән хрестоматия әҫәренә әйләнгән, шиғриәтебеҙҙең аҫыл ташы булған „Кем өсөн“ исемле кескәй генә шиғырында Бабичтың романтизмы төп асылында кәүҙәләнә. Бына ул шиғыр:

Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
— Ит ғәфү, әй, ай, — тинем мин, —
Нурҙарыңды урланым.

— Һис зарар юҡ, ал, — тине ай, —
Ал да сәс нур халҡыңа!
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым ҡояш нурҙарын.

Ниндәйҙер „серле“ ярһыуҙарҙан түгел, халҡына яҡтылыҡ эҙләп, шағир йыһандарға осто һәм унда ла үҙе өсөн иң изге һүҙҙәрҙе ишетте: „Ал да сәс нур халҡыңа!“

1916 йылдың 11 майында Мәскәүҙәге „Сүз“ гәзитендә Бабичтың „Ҡараңғылыҡта“ исемле шиғыры баҫылып сыға. Оҙаҡ та үтмәй — 15 майҙа — шул уҡ гәзиттә шағирҙың „Бәхетем“ тигән шиғыры донъя күрә. Бер арала сыҡҡан әҫәрҙәрҙең исемдәре үк ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә.

„Ҡараңғылыҡта“ шиғырында шағир, яҡты эҙләп, күккә баға — унан яҡты инмәй, ергә баҡһаң — ер ҙә ҡараңғы. Үкһеп илаһаң да, ҡараңғылыҡ таралмай.

„Бәхетем“ шиғыры иһә сыуаҡ күренеш, сағыу буяуҙар менән башланып китә:

Зәңгәр күк — тажым, сыбар ер — тәхетем,
Үҙем — азат йән, аҡ ҡояш — бәхетем.

Ошо кинәнес мәлендә шағир донъяға һыймай ҡанатлана:

Шашам, ашҡынам... Шатланам сикһеҙ.
Азат мин, азат! Бәхетем офоҡһоҙ!

Шағирҙы уратып алған ҡараңғылыҡ һәм уның алдында балҡып киткән икһеҙ-сикһеҙ офоҡһоҙ бәхет... Бабич лирикаһында кеше күңеле ошондай киҫкен үҙгәрештәрҙә асыла. Әлеге ике хәлдең шағир яҙмышында ҡайһыһы йышыраҡ ҡабатланғандыр — уныһы башҡа мәсьәлә. Һәр хәлдә, „бәхетем офоҡһоҙ“ тип ашҡыныуҙан бигерәк, Бабичҡа „офоғом бәхетһеҙ“ тип йышыраҡ өҙгөләнергә тура килгәндер. Был шиғырҙарҙа шәхесте төрлө кисерештәрҙә һүрәтләү, кеше күңелен күп яҡлап асыу айырыуса мөһим.

„Һалҡын аҡылың үҙеңә булһын!“ — Бабичтың донъяға төбәп әйтелгән был һүҙе уның ижад тәбиғәтенә лә бик тап килә. Шағирға ҡоро вәғәз һөйләү йәки уй-кисереште ялҡытҡыс аңлатыу ят булды. Кеше психологияһының төрлө хәлдәрен асыу оҫталығы, шәхестең күп яҡлы рухи донъяһын күрһәтеү һәләте буйынса Бабич шиғриәте башҡорт әҙәбиәтенә байтаҡ яңылыҡ алып килде. Бабич ҡоро вәғәз йәки шау тойғо шағиры булманы. Уның ҡайнар кисерештәре үткер фекер, мөһим ижтимағи мәсьәләләр менән бергә үрелеп, башҡорт лирикаһының психологик тәрәнлеген, тормошсан ерлеген нығытты.

Бабичтың „Себер сәхрәһендә ҡаҙаҡта уҙҙырған көндәрем“ исемле 1913 йылғы көндәлек яҙмаларында ошондай юлдар бар: „Уйымдың осоҡырыйы юҡ. Уйланған ваҡытта... хыял донъяһына сумған ваҡытта, донъямды онотам. Күҙ алдым томалана, һаңғырау кеше кеүек, һүҙҙе ишетмәйем... Ауырыған ваҡытымда ауырыуым күберәк башымда була... Ҡайһы ваҡытта сәбәпһеҙ-ниһеҙ ауырта“.

Шәйехзада бәләкәстән үк бына шулай туҡтауһыҙ уйланыусан, донъяһын онотоп хискә бирелеүсән шәхес булып үҫә. Уның шиғриәтендәге

фәлсәфәүилектең тамырҙары шағир тәбиғәтенең ошо сифаттарынан килә. Кескәй генә шиғырҙарында ла ул ғәжәп тәрән фәлсәфәүи ҡатламдарға үтеп инә алды. Мәҫәлән, ҡылған енәйәттәр һәм шуларға бәрәбәр ғәҙел хөкөм тураһында донъя әҙәбиәтендә кем генә уйланмаған. Ф.М.Достоевскийҙың „Енәйәт һәм яза“ны үҙе ни тора! „Гонаһ, яза“ исемле шиғырында Бабич ошо мәңгелек хәлдәрҙең үҙ яҙмышындағы бәрелешен ғәжәп үҙенсәлекле кәүҙәләндерә:

Таянып эйәккә,
Күҙ терәп йыраҡҡа,
Ултырам уйланып
Бер үҙем бер яҡта.

Уйланам, уйланам,
Уй менән юғалам...
Бер ваҡыт кинәттән
Һиҫкәнеп уянам.

Уянам, ни күрәм:
Әйләнә һәр тирәм,
Уй тәрән һәм томан...
Шаҡ ҡатып тик торам.

Мин, имеш, аҙам,
Мин, имеш, туҙам,
Гонаһым — туҙан!
Тау кеүек язам.

„Ауырыуым-һаулығым“ шиғырында күнегелгән төшөнсәләрҙе бөтөнләй көтөлмәгәнсә бороп ебәрә, уларға яңыса фәлсәфәүи, әхлаҡи мәғәнә бирә:

Һау йөрөүҙән яҡшыраҡ аҡ юлға кереткән ауырыуым;
Сәнселеп китһен хоҙайҙан йөҙ сөйөрткән һаулығым!

Бабич поэзияһында мөхәббәт лирикаһы шулай уҡ үҙенсәлекле урын алып тора. Бабичтың һөйөүе хаҡында Ғәлимйән Ибраһимов: „Ул матур ҡыҙҙы Алла менән йәнәшә ҡуя“, — тигәйне. Бабичтың Алланан шикләнгән саҡтары ла булды, уның менән һәр саҡ башын юғары тотоп һөйләште. Ләкин һөйөү алдында ул һәр саҡ түбәнселекле булып ҡалды.

Башҡорт шиғриәтендә егерменсе быуат башында М.Ғафури, Д.Юлтый, С.Яҡшығолов, Ф.Туйкин, Х.Ғәбитов, Б.Мирзанов әҫәрҙәрендә ҡатын-ҡыҙ образы иң элек мәғрифәтселек талаптарынан сығып яҡтыртылды. Ҡатын-ҡыҙға тигеҙ хоҡуҡ биреп, ғилем һәм мәҙәниәт майҙанына сығарыу — был өлкәләге иң тәүге талап шул ине.

Мәғрифәтсе әҙәбиәттә билдәле әхлаҡ ҡағиҙәләре буйынса ижад ителгән бер яҡлы шәхестең һөйөүе лә йыш ҡына „норматив“ була, уға төрлөлөк, шағирҙың үҙ яҙмышы, холоҡ-ҡылығы аша йәнле булып асылған сифаттар етмәй.

Бабич лирикаһы был йәһәттән башҡорт әҙәбиәтендә шулай уҡ мөһим яңылыҡ булды. Бабич ҡатын-ҡыҙға төрлө ҡанундар һалған бығауҙарҙы фашлау менән бергә, ниндәйҙер тойғоһоҙ, яһалма һөйөүҙе лә кире ҡаҡты. Шағир тойғоларҙың тәбиғилиген, мөхәббәттең бөйөклөгөн данланы.

„Ҡыҙ“ тинеңме — ҡан ҡыҙырға башлай, бәғерең һыҙлана,
Йәш йөрәктә әллә ниндәй тәмле уйҙар ҡуҙғала.

„Ҡыҙ“ тинеңме — сыға йәмле, мөхәббәтле тауыш,
Донъяһы ҡорбан һиңә, әй, йәнле идеал — ҡыҙ бала.

Шиғырҙағы ошондай юлдар — „ҡыҙ“ һүҙенең тамырын „ҡыҙмаҡ“-тан эҙләү кеүек шуҡлыҡтар ул осорҙа күптәр өсөн көтөлмәгән хәл булды.

Ә бына „Исемдәр баҡсаһы“нан бер өҙөк:

Туҡһан туғыҙ мәртәбә „Алла“ тигәс,
Асия тип ҡысҡырып ҡуй йөҙ тигәндә.

Бындай шаянлыҡ, ҡыҙҙы Алла менән тиңләү, ул саҡта иң ҙур гонаһтарҙан һанала ине.

Бабичтың мөхәббәте бары һоҡланыуҙан ғына тормай, унда шатлыҡ та, һағыш та, кинәнеү ҙә, һыҙланыу ҙа бар. Шағир һәр яһалмалылыҡты, ялған биҙәктәрҙе кире ҡаҡты. Төрлө ялған „тыйнаҡлыҡтың“ кеше рухын бығаулаусы бер юл икәнлеген яҡшы аңланы ул. Матур ҡатындарҙы күргәс тә, шағир былай тине:

Матур һындар, матур ҡыҙҙар, матурһындар,
Әйткән саҡта исемегеҙ ҙә матур сыңлар.
Һеҙҙе күреп йәмгә сумып, китәм иреп,
Ғаҡылһыҙҙар: „Ғаҡылһыҙ!“ — тип баҡырһындар...

Ике тәңре: әүүәл — алла, икенсе ҡыҙ! —
Тимәгеҙ, билләһи, кафырһыңдар!

Уның өсөн мөхәббәт — ни тиклем генә ғазаптар килтерһә лә, кешенең тигеҙһеҙ мөхиттә таҙарыныу, ижтимағи дисгармония араһында бер аҙға булһа ла гармонияға килеп сыҡҡан мәлдәре. Бабич һөйөүҙе бөтә тормошсанлығында, тантанаһында һәм фажиғәһендә сағылдырҙы. Уның шиғриәте башҡорт әҙәбиәтенә мөхәббәттең тәбиғи, кешесә, ябай образын алып килде.

Һөйөү тойғоларын кисереү Бабич шиғырҙарында һәр ваҡыт тиерлек тәбиғәт менән бәйләнештә асылды. Уның „Яҙғы йыр“ исемле шиғыры бына нисек башлана:

Ултырҙым мин тауҙың күкрәгенә,
Йырҙар яҙам, елкәй, иҫмәй тор.
Шишмәкәй, тын! Әкрен!.. Сеү! Шаулама!
Үткән ғүмерем, иҫкә төшмәй тор.

Сылтырап аҡкан шишмә буйҙарында
Аһ, мин йөрөнөм былтыр кем менән?
Шул саҡтарҙан, шишмә, алыҫ аҡтың,
Ҡалдым һыҡрап ауыр моң менән.

Бында шағирҙың хистәр ташҡынына ҡушылып, бөтә донъя тулҡынлана, шаулай, әйләнә. Бында шағир тәбиғәт менән бер йән. Тәбиғәткә ул нисек һаҡ ҡына, иркәләп кенә өндәшә: елкәй, шишмәкәй, гөлкәй, һандуғасҡай. Ләкин „шишмәкәй“, „елкәй“ һ.б. ғына түгел, „шишмәкәй, тын, сеү, шаулама“, „Зинһар, тимен, елкәй, иҫмәй тор“ һ.б. Шағир тәбиғәткә, сабыйға әйткән кеүек, ипләп кенә һүҙ әйтә (“Сеү, әкрен“), кеселекле булып үтенеп һорай (“Зинһар!“), һөйгәненә һөйләгәндәй, һүҙҙәрен өҙөлөп-өҙөлөп әйтә (“Һандуғасҡай, наҙлым“).

Шағирҙың бәхетле бер минутында уның алдында донъя ошондай ҡиәфәттә баҫты:

Аһ, бөгөн донъя кейенгән ҡыҙға оҡшап тәп-тәтәй,
Ҡыҙ булып баҫкан тәбиғәт донъяға ап-аҡ тәпәй.

Бабич шиғриәтендә ҡыҙ тәбиғәтте матурлап, тәбиғәт ҡыҙ һылыулығын йәмләп, айырылғыһыҙ бәйләнештә йәшәй.

Шәйехзада Бабич тигәндән замандаштарының күҙ алдына үткер телле шиғырҙар яҙыусы, үҙе уларҙы сәхнәнән ғәжәп оҫта башҡарыусы мәшһүр көлдөргөс күҙ алдына килеп баҫкан. Башҡорт һәм татар донъяһында Бабич үҙ заманының иң билдәле шағиры булған, һәм халыҡта ул барыһынан да бигерәк сатира һәм юмор әҫәрҙәре менән шөһрәт яулаған. Бында ғәжәпләнер урын юҡ, сөнки, лирикаға ҡарағанда, шаян әҫәрҙәр уҡыусыларға еңелерәк тә, тиҙерәк тә барып етә, һәм уларҙың аудиторияһы ла күпкә киңерәк була.

1914—1919 йылдарҙа Бабич үҙенсәлекле сатирик һәм юморист булараҡ ҙур дан ҡаҙанды, төрлө шиғырҙарын, „Ғазазил“ исемле поэмаһын яттан һөйләп, Өфө, Ырымбур, Троицк, Бөрө, Темәс сәхнәләрен шаулатты, төрлө ауылдарҙа, йыйындарҙа ла кешеләр уны хайран ҡалып тыңланы. Асылда Бабич беренсе сиратта шиғриәтте сәхнәгә шул дәрәжәлә күтәрә алды һәм бер үҙе тотош кисә тыуҙырыр көскә әйләнде. Уның исеменең телдән телгә күсеүенең, ижадының ғәйәт таралған булыуының бер сере нәк шул сәхнә эшмәкәрлегенә барып тоташа.

Ләкин тамашасыларҙың алҡыштары, ҙур-ҙур залдарҙы һелкетһә лә, барыбер мәле еткәс тынып ҡала, ә Бабичтың сәсән телле әҫәрҙәре һаман да халыҡ күңелендә йәшәй.

Ш.Бабичтың юмористик һәм сатирик әҫәрҙәренең тәьҫир итеү көсө уларҙың тапҡыр образдарға ҡоролоуында, һүҙ мәргәнлегендә генә түгел, иң мөһиме, шағирҙың ҡыйыулығында, оло проблемалар күтәреүендә, әҫәрҙәрҙең тормошсан йөкмәткеһендә. Ул көлкө булһын өсөн көлмәне, уның өсөн буш һүҙ уйнатыусыларҙан да һөмһөҙөрәк кешеләр булмағандыр. Йомшаҡ күңелле шағир тормоштағы хаҡһыҙлыҡтарҙы, йәмһеҙлектәрҙе күргәндә ҡаты бәғерлегә әйләнде, уларҙы әсе көлөп тә, мәрәкәләп

тә тәнҡитләне. Жанр һәм форма яғынан әҫәрҙәр төрлө: үҙенсәлекле мәрәкә йәки еңелсә ирония менән һуғарылған юмористик шиғырҙар, уҫал сарказмлы әҫәрҙәр, пародиялар, балладалар. Улар араһында, әлбиттә, иң күренеклеләре „Ғазазил“ менән „Китабеннас“.

Шағирҙың „Ғазазил“ поэмаһы ла, „Күктә — алла, ерҙә — иблес, мин — малай...“ исемле билдәле шиғыры ла 1916 йылда яҙылған. Әлеге шиғырҙа поэмаға асҡыс булырҙай фекер үҙәктә тора: алла менән иблес үҙ-ара кеше өсөн һуғыша, береһе күктән тороп, икенсеһе ерҙә кешене иҙә. Поэмала ошо идея киң күренештәр, көлкөлө ваҡиғалар аша асыла. Унда алла менән иблес араһындағы тартыш — шул уҡ кеше рухын иҙеү өсөн тартыш ул. Иблес тыштан тынғыһыҙ көрәшсе булып күренһә лә, уның барлыҡ эшмәкәрлеге кешегә ҡаршы йүнәлтелгән.

Ике йөҙҙән ашыу эпиграмманан торған „Китабеннас“ — бай йөкмәткеле һәм ҡатмарлы әҫәр. Унынсы йылдарҙа башҡорт һәм татар донъяһында аҙмы-күпме күҙгә күренгән, исеме матбуғатта ишетелгән бер генә зыялый ҙа бында инмәй ҡалмай, тиерлек. Ошо әҫәргә нигеҙләнеп, Бабичтың ғәжәп киң рухи даирәһе, уның ҡарашының заманды ниндәй ҡолас менән иңләй алыуы, ниндәй зирәклек менән күрә белеүе хаҡында тағы ла махсус һөйләргә булыр ине.

Бабич — шаян һәм моңһоу тәбиғәтле, яғымлы һәм ҡырыҫ холоҡло шағир. Шуға ла уның лирикаһында нескә уй-кисерештәрҙә лә йыш ҡына ирония һиҙелеп-һиҙелеп ҡуя. Ә иң уҫал сатираһына ла ниндәйҙер лирик ағым, йомшаҡ мәрәкә килеп ҡушыла. Шағир йомшаҡ йәйеп, ҡатыға ултыртып та ҡуйғылай.

Бына Бабичтың бая телгә алынған классик бер парсаһы:

Күктә — алла,
Ерҙә — иблес,
Мин — малай,
Береһе: „Дин!“ — тип,
Береһе: „Мин! — тип
Тартҡалай,
Белмәйем,
Әллә алла,
Әллә иблес
Алдалай?!

Был шиғырҙа лирика күберәкме, әллә сатирамы? Бабич бер ваҡытта ла бары яратыу йәки бары асыу менән генә йәшәмәне. Һөйөү менән мөлдөрәмә тулы лирикаһында ла осҡонланып нәфрәтләнә белде һәм иң уҫал сатираһында ла кешегә мәрхәмәтлелеген юғалтманы. Әммә Бабичтың мөхәббәте һәм нәфрәте асыҡ булды. Туған халҡы уның иң оло һөйөүенә әйләнһә, кешенең азатлығын быуыусы һәр бер ҡанун, шәхесте һәм милләтте иҙеүсе һәр яуыз көс уның нәфрәтен уятты.

Әҙәбиәтебеҙ тарихына ла, нисәмә быуын уҡыусылар күңеленә лә Шәйехзада Бабич һоҡландырғыс шағир, шиғриәтебеҙҙең иң яҡты йондоҙҙарының береһе булып инеп ҡалған. Ә уның үҙ заманында тиңдәше

булмаған фельетонист икәнлеген бөгөн кемдәр генә белә? Бабичтың ижади эшмәкәрлегендәге был тармаҡ әлегә тиклем билдәһеҙ булып ҡала килде, һәм уның фельетондары тәү тапҡыр „Зәңгәр жырлар“ (Ҡазан, 1990) китабында Ғәлимйән Ғилманов тарафынан бергә тупланып донъя күрҙе. Был фельетондар менән танышҡан кеше Бабичтың һүҙ оҫталығын, ваҡиғаларҙы нисек байҡауын тағы ла тулыраҡ күрер.

Бабич — фольклорсы. Быныһы ла уның ижадының әлегә тиклем өйрәнелмәгән бер яғы. Ғүмере буйы ул халыҡ ижады гәүһәрҙәрен йыйыуҙан туҡтамаған, ут эсендә йөрөгәндә лә ошо ятраткан эшенә форсат табырға тырышҡан.

Бабич — педагог. Шағирҙың тормош юлын өйрәнгәндә, уның был эшмәкәрлеген дә ситләп үтеү мөмкин түгел. Әле ун өс йәшендә үк Шәйехзада Ҡыйғаҙытамаҡ мәҙрәсәһендә уҡыта, ун биш йәшендә ҡаҙаҡ араһында хәлфә була, „Ғәлиә“лә сағында остазы Зыя Камалиҙың улына, буласаҡ йырсы Әминә Бәхтизинаға дәрестәр бирә, мәҙрәсәләге түңәрәккә етәкселек итә. 1916—1917 йылдарҙа Троицкиҙа уҡытыусы булып эшләй.

Тикшеренә башлаһаң, башҡорт милли матбуғатын ойоштороусы тәүге журналистарҙың береһе шулай уҡ Шәйехзада Бабич бит әле.

Ҡыҫҡа ғына ғүмер эсендә ниндәй эштәр эшләнгән. Ә ижад мираҫының күпме өлөшө тупланып та аҙаҡ юғалып ҡалған. Беҙҙең бәхеткә килеп еткән тиклеме генә лә — үҙе оло хазина. Ошоларҙың барыһын барлағандан һуң, Бабичтың ни тиклем ең һыҙғанып эшләүен, ниндәй илһам менән дәртләнеп йәшәүен һәм ниндәй ялҡын менән ижад итеүен күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел.

Бабич шиғриәтенең ҡайһы бер үҙенсәлектәренә туҡталып үткәндән һуң, уларҙың барыһын бергә туплаусы, берләштереүсе төп сифатты атап әйтергә кәрәк. Был төп сифат — Бабич ижадының халыҡсанлығы.

Бабичтың ижади үҫеше шул осорҙағы ижтимағи хәрәкәт менән тығыҙ бәйләнештә барҙы һәм шағир биографияһында башҡорт милләтенең рухи биографияһы үҙенсә сағылды. Бабичтың һәр аҙымы тиерлек халыҡ яҙмышындағы мөһим үҙгәрештәргә тамырланды. „Халҡым өсөн!“ тигән ҡанатлы һүҙҙәр уның өсөн ҡоро һүҙҙәр булып ҡына ҡалманы, был тойғо әҫәрҙән әҫәргә асыҡлана, тормошсан йөкмәтке менән тулылана һәм байый барҙы. Был үҫеш юлында халыҡ төшөнсәһе лә, ижадтың халыҡсанлыҡ сифаты ла артабан баҙыҡланды, уның ижтимағи ерлеге, милли йөҙө йылдан-йыл асығыраҡ күҙ алдына баҫты.

„Ғәлиә“не 1916 йылда тамамлап сыҡҡандан һуң, Шәйехзада Бабич Троицкиҙа бер уҡыу йылы мөғәллимлек итте. Февраль революцияһын ул ошонда ҡаршыланы, батша тәхете ҡолатылыуын, иҙелгән милләттәргә азатлыҡ килеүен тәбрикләп шиғырҙар яҙҙы, „Хөр милләт“ исемле гәзит сығарҙы, демонстрацияларҙа ҡатнашты.

1917 йылдың авгусында „Ҡармаҡ“ журналының саҡырыуы буйынса Бабич Ырымбурға килде. Башҡорт тарихындағы бик күп ҡатмарлы ваҡиғаларға шаһит булған был ҡала Бабич килгән осорҙа үҙенең әҙәби һәм мәҙәни көстәре менән дә башҡорт һәм татар мөхитендә Өфө, Ҡазан

кеүек танылған үҙәктәрҙең береһе ине. Бында Бабичты иң нык тартҡаны „Ҡармаҡ“ журналы булһа ла, унда шағирға оҙаҡ эшләргә тура килмәне. Яңы тарихи ваҡиғалар бәрелешендә уның яҙмышы икенсе йүнәлешкә боролдо.

Батша тәхете ҡолатылыу менән, Рәсәйҙә милли хәрәкәт айырыуса көсәйеп китте. Был осорҙа башҡорттар араһында ла ер һәм милли азатлыҡ өсөн көрәш киң йәйелде, һәм Башҡортостан Рәсәйҙә милли көрәштең иң нык ҡыҙған урындарының береһенә, Зәки Вәлиди етәкселегендәге башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте илдәге был ҡуҙғалыштарҙың иң нык ойошҡан, алда барған көстәренең береһенә әйләнде. Башҡорт халҡы үҙенең быуаттар буйына яҡлап килгән изге талаптарын ҡулына ҡорал тотоп яуларға әҙер ине.

Башҡорт милли-азатлыҡ көрәше 1917 йылда айырыуса ҡатмарлы шарттарҙа башланып китте. Баштан уҡ был хәрәкәт татар буржуаз шовинистарының ҡаршылығына осраны. 1917 йылдың майында Мәскәүҙә йыйылған Бөтә Рәсәй мосолмандарының съезы ҡарарҙарында татар буржуазияһының башҡорт халҡын да үҙ ҡулына алырға тырышыуы сағылды. Ләкин „Мосолман берлеге“ лозунгыһын алға һөргән бындай ынтылыштың ерлекһеҙ булыуын артабанғы тарихи ваҡиғалар яҡшы күрһәтте. Өфөләге, Мәскәүҙәге мосолман съездарында башҡорт милли хәрәкәт вәкилдәре үҙҙәренең айырым ойошмаһына тупланды. Мәскәүҙә бөтә Рәсәй мосолмандарының беренсе съезында татар буржуаз милләтселәре менән килешә алмайынса, башҡорт делегаттары (делегацияла бөтәһе 60 кеше ине) йыйынды ташлап китте һәм үҙҙәренең „Башҡорт бюроһы“н төҙөнө. Был бюро программа төҙөүгә һәм съезд йыйыуға әҙерлек башланы.

1917 йылдың икенсе яртыһында был хәрәкәт тағы ла киңерәк таралғайны. 20—27 июлдә Ырымбурҙа, 25—30 августа Өфөлә беренсе һәм икенсе башҡорт съездары булып уҙҙы. Унда даими орган — Башҡорт шураһы ойошторолдо. Тиҙҙән Шураның „Башҡорт“ исемле гәзите сыға башланы.

Барлыҡ Башҡортостанда, төньяҡтағы ғәйнә башҡорттарынан алып көньяҡтағы Туҡсоран яҡтарына тиклем, көнсығыштағы ялан-ҡатайҙарҙан алып көнбайыштағы Һамар далаларына тиклем киң араларҙы иңләгән был милли-азатлыҡ хәрәкәтенең үҙәге Ырымбурҙа тупланды. Был ҡалала ноябрь урталарында Каруанһарай яңынан ҡайтарып алынды. Башҡортостан мөстәҡиллеге иғлан ителде, мәркәз Шураһының фармандары халыҡҡа таратылды, башҡорт армияһы төҙөү буйынса эштәр башланды, 8—20 декабрҙә өсөнсө башҡорт ҡоролтайы ҙур күтәренкелек менән үтте. Бабич был тарихи ваҡиғаларҙың үҙәгендә булды, Башҡорт мәркәз Шураһының сәркәтибе, „Башҡорт“ гәзитен ойоштороусыларҙың береһе булараҡ, яуаплы һәм тынғыһыҙ эштәр башҡарҙы. 1917 йылда Шәйехзада Бабич Ырымбурҙа башҡорт йәштәренең „Тулҡын“ ойошмаһын төҙөүгә күп көс һалды, 1918 йылдың декабрендә ул рәсми рәүештә иғлан ителде. Бабич ҡулы менән яҙылған декларацияла ойош-

маның башҡарма комитеты ағзалары йәштәргә „Йәшәтегеҙ „Тулҡын“-ды һәм тулҡынландарығыҙ башҡорт донъяһын!“ тигән саҡырыу менән өндәште. Был ойошма хәҙерге башҡорт телендә китаптар сығарыу юлында мөһим аҙымдар яһаны. Шәйехзада Бабичтың „Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар“ исемле тәүге йыйынтығы бына шундай эшмәкәрлектең һөҙөмтәһендә „Тулҡын“ нәшриәтендә донъя күрҙе.

Китапҡа 1917 йылдың көҙөнән алып 1918 йылдың көҙөнә тиклем яҙылған шиғырҙарҙың күпселегә ингәйне, ҡайһы бер элеккерәктәре лә урын алғайны (“Утрау“, „Ҡан шәүләләре“). Егерме ике шиғырҙан торған был баҫма шағирҙың үҙе тере саҡта сыҡҡан тәүге һәм һуңғы китабы булды.

Шағирҙың халыҡсанлығы, уның тәбиғи һәләте кеүек үк, әсә һөтө, атай-олатайҙар рухы менән бирелһә лә, ул үҙгәрмәҫ сифат түгел, тормош ағышында төрлө ҡаршылыҡтар аша тулылана, көсәйә йәки, киреһенсә, һәләкәткә дусар була.

Бабичҡа үҙенең ҡыҫҡа ғына ғүмерендә байтаҡ эҙләнеүҙәр һәм һынауҙар юлы үтергә, ҡаршылыҡтарҙы еңергә тура килде. Әммә башҡорт халҡының милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыу уның өсөн иң ҙур һынау булды. Һәм был һынауҙа шағир бер генә мәлгә лә һынатманы.

1917 йылда ойошҡан башҡорт милли хәрәкәтенең тамырҙары быуаттар дауамынан килгән күтәрелештәргә барып тоташа ине, һәм уларҙың барыһының төп талабы — ер мәсьәләһе, Башҡортостандың азатлығы мәсьәләһе ине. Ерҙәрҙе талау, милли иҙеү Бабич күңеленә әсә һөтө, сәңгелдәк йыры менән бергә һеңешкән аяныс хәҡиҡәт ине. 1905—1907 йылдарҙа Бөрө төбәгендәге ер өсөн ҡанлы болаларға шағир туранан-тура шаһит булды. Һәм был тетрәткес хәлдәр уның донъяға асылып килгән зиһенендә юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы. Ер талау сәйәсәте башҡорт халҡының милли үҙаңына йоғонто яһаған кеүек, Бабичтың ҡараштарындағы ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе лә тыуҙырҙы. 1917 йылда, ер мәсьәләһе ҡабырғаһы менән ҡуйылған саҡта, Бабичта был тема бигерәк тә көслө яңғыраны. Ерһеҙ азатлыҡ юҡ. Ерһеҙ азатлыҡ булмаған кеүек, тигеҙлек, ирек тураһында уйланыуҙарҙың ер образына килеп тоташыуы тәбиғи ине. „Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ, бүтәнсә юҡ сарабыҙ“ — ер тураһында шалтырауыҡ һүҙҙәр ҡысҡырмайынса, шағир бына шулай асыҡ итеп әйтте. Ер тураһында уйлағанда, ул ошо хаҡта башҡорт фольклорында үҫтерелә килгән уйҙарҙы дауам итте.

„Тупраҡ“ исемле шиғырында Бабич былай тип яҙғайны:

Тупраҡ беҙҙең анабыҙ,
Беҙ тупраҡҡа балабыҙ.
Тупраҡ, тупраҡ, тупраҡ!
Күкрәктәге сәнабыҙ.

Шағирҙың был фекере башҡорттоң „Беренсе сада“ бәйетендәге төп мотив менән бик оҡшаш.

Еребеҙ ул анабыҙҙыр,
Беҙҙе тәрбиә ҡылалыр,

Ер өсөн башҡа милләттәр
Йәндәрен фиҙа ҡылалыр.

„Список №9“ тигән шиғырында Бабич халыҡты Башҡорт мәркәз Шураһының исемлеген яҡларға өндәгәйне. Был өндәмәлә шундай һүҙҙәр бар:

Китһә ерҙәр, бел шуны: мәсет китер, мәктәп китер,
Йәмле башҡорт ерҙәрен сирмеш, урыҫ ҡаплап китер.

Бына һиңә, тик ер: донъяң да — ер, ғиҡбаң да — ер,
Ерҙән айырылһаң, һине һәр кем иҙеп тапап китер.

Эй, туған башҡорт, әгәр булмаҫҡа булһаң бәдбәхет,
Ерҙе һаҡла, ер ҡосаҡла, ер һиңә алтын тәхет!

Милләттең йәшәү нигеҙе булған ошо ғәзиз ерҙе яҡлап ҡалыу өсөн көрәштә шағир Бабич иңенә яугирлек бурысы ла өҫтәлде, һәм ҡанлы яуҙарҙа, утлы алыштарҙа ул бик күпте кисерҙе. Шағир һәм яугир булыу беҙҙең халыҡта бик борондан килә, һәр хәлдә, беҙ белгәне Салауаттарҙан алып Мостай Кәримдәргә килеп етә. Зәки Вәлиди ҙә ғалим һәм яугир. Бабич өсөн иһә яугирлек үҙенсә ырыу тамғаһы, илкәйе өсөн Париждарға барып еткән Илекәйҙәрҙән, Бәбес ейәне, Мөхтәр улы Илекәйҙәрҙән килгән йола булған.

Шулай ҙа, башҡорт халҡы — яугир халыҡ, тип йыш ҡына ғорурланып әйтелгән һүҙҙәр йөрәкте сәнсеп тә ҡуя. Башҡорт ҡулы ҡысыткандан ҡылысҡа тотонмаған, илен һаҡлап ҡорал алған. Ләкин уға ҡайһы саҡта үҙе теләмәгән яуҙарға ла ат эйәрләргә тура килгән.

Бабичтың шағирлығы Хоҙай тарафынан бирелһә, яугирлеге зарураттан килгән. Туған милләте азатлыҡ өсөн изге көрәшкә күтәрелгәндә, Бабич шиғырҙары кешеләрҙе рухландырыусы оран булды. „Сәсәнмен тип кем әйтмәҫ, яу килгәндә өнө юҡ“, — тигәндәр борон. Милли күтәрелеш ваҡытында Бабич үҙендә тағы ла ҙурыраҡ яуаплылыҡ тойҙо, дәһшәтле ваҡиғалар уның өсөн һынау ғына түгел, ҡәләмен үткерләүсе сар ҙа булды. „Йәш Башҡортостан“ китабына „Ҡурайҡайға“, „Башҡортостан“, „Салауат батыр“, „Көтмәҫтән“ кеүек, һәр юлынан тыуған ер рухы бөркөп торған шиғырҙар тупланғайны. „Ҡурайҡайға“ шиғырында шағир төшөнкөлөктө түгел, ил күңелендәге йәшәү дәртен, күтәренке тойғоларын данланы:

Быуын-быуын ғүмер Башҡортостан
Һуғарылды ҡара ҡан менән;
Сыҡтыҡ ҡара көстән — ҡанды эскән,
Һуғарылһын инде йәм менән...
...Уйна, ҡурай, күктән йәм шаулаһын,
Нур уйнаһын баштар өҫтөндә!

Йәм яҡтыһы юйһын ҡан шәүләһен,
Гөлдәр үҫһен таштар өҫтөндә!

„Башҡортостан“ шиғырындағы һәр юлда тыуған ерҙең матурлығы төрлө яҡлап нурлана:

Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур;
Киләсәктә был ергә
Хоҙай үҙе ҡыҙығыр...

Башҡортостан — гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан.

Хоҙайҙыҡы Хоҙай эше, әммә Башҡортостанды төрлө яҡҡа йолҡҡоларға теләүселәр, уның байлығын талаусылар һәр саҡ етерлек булды. Халыҡтың үҙ хоҡуҡтарын яулап көрәшкә күтәрелеүен сағылдырған шиғырҙарында Бабич сәсәнлек йолаларын яңыртты, боронғо ҡобайыр жанрына яңы йөкмәтке, яңы үткерлек өҫтәне.

1917—1918 йылдарҙа Бабич шиғриәтендә юмор бөтөнләй осрамай тиерлек. Фажиғәле, дәһшәтле осорҙа шағир уйҙары ла күберәк хафалы ине.

„Йәш Башҡортостан“ китабына ингән „Башҡортостан мөхтәриәтенә ҡаршы татарға“, „Список №9“, „Ҡазан платформаһы мөридтәренә махсус“ исемле шиғырҙар оҙаҡ йылдар буйы Бабичҡа милләтсе мөһөрөн һуғыр өсөн уйлап сығарылған сәбәптәрҙең береһе булып килде. Ләкин „Башҡортостан мөхтәриәтенә ҡаршы татарға“ тигәндән шағир барлыҡ татар халҡын күҙ уңында тотманы, әлбиттә. Татар әҙәбиәтенә, бигерәк тә бөйөк Туҡайға сабый саҡтан уҡ ҡайнар һөйөү һаҡлаған Бабичтың татар халҡына ниндәйҙер нәфрәт йәки үс тотоуы һис тә мөмкин түгел ине. Шағир башҡорт халҡының тиң хоҡуҡлығын танымаусы сәйәси төркөмдәр менән бәхәскә инде, Башҡортостандың үҙаллылығын яҡланы.

Башҡорт шиғриәтендә Башҡортостан образы тәү башлап Шәйехзада Бабич шиғырҙарында кәүҙәләнде. Әлбиттә, ут эсендә йөрөгәндә шағир „Башҡортостан-Гөлбостан“ тип кенә йөрөмәгәндер, шулай ҙа уның һыҡтаған саҡтары был осорҙағы шиғырҙарында байтаҡ күренһә лә, маҡсаттарына шикләнеп ҡараған, юлдан тайпылған саҡтары юҡ. Иң ауыр саҡтарҙа ла ул кешеләргә йылы һүҙ таба белде, киләсәккә өмөт уятырға тырышты. „Күҙеңде ас“ — был шиғырҙың исеме үк уяулыҡҡа саҡырып тора:

Күҙеңде ас, егет, бул ҡаһарман,
Зәһәр сәсеп ажғыр, ҡәһәрлән,

Күр, илеңде ялмап һәр яғынан
Дөрләп янып килә йәһәннәм...

...Мәңге һүнмәç, ахыры, был йәһәннәм,
Һаман яныр, һаман ҡыҙҙырыр.
Ғәзиз илең һинең, әй, ҡаһарман,
Һаман ауыр көндәр уҙҙырыр.

Һис ҡайғырма, шатлан әүәлгесә,
Бәхет еңер әле, иншалла,
Йәһәннәмдәр аша уҙмайынса
Ожмах табырбыҙ, тип ышанма!

Күпме йәһәннәмдәр аша үткән башҡорт ғәскәрҙәре 1919 йылдың 18 февралендә ҡыҙылдар яғына сыҡты. Ошо ваҡытта Бабич „Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитап“ тигән оҙон шиғри өндәмәһен яҙҙы. Әçәр листовка рәүешендә баçылып, ғәскәрҙәргә, ауылдарға таратылды. Был хитап шул осорҙағы сәйәси хәлдәрҙе аңлатыу менән бергә, башҡорт азатлыҡ хәрәкәтенең борондан килгән тамырҙарын барлау һәм милләттең бөгөнгө көрәш дәртен данлау яғынан да (“Юҡ, һатманы башҡорт иçке исемен, атылып килеп сыҡты майҙанға!“) бик әһәмиәтле. Уйлап ҡараһаң, Бабичтың барлыҡ ижады туған халҡына яҙылған моңло хитап ул.

Башҡорт Республикаһы Ваҡытлы Хәрби-революцион комитетының 1919 йыл 25 февраль фарманы менән Бабич Башревкомдың башҡорт матбуғатына эшкә тәғәйенләнгәйне. Ләкин шағирға был эштә оҙаҡ эшләргә насип булманы. Фронттың бер яғынан икенсе яғына сығып ҡына, яугирҙәр тыныс тормош таба алманы. Бер йәһәннәмдән ҡотолдом тигәндә, башҡортҡа яңы тамуҡтың уты үрләй, суҡмары киҙәнә башланы. Бабич бына ошо тамуҡ эсендә һәләк булды.

1919 йылдың 24 мартында Бабич типографияны тейәп, ун бишләп һыбай менән Темәстән Ҡыҙыл Мәсеткә (Мораҡҡа) юлға сыға. Юлда ул күҙҙе ҡамаштырып, яҙғы ҡояшта ялтырап ятҡан Уралға һоҡланып: „Мин был яҡтарға тағы киләм әле. Ошо урмандар шаулап япраҡ ярғанда, Һаҡмар буйының муйылдары шаулап сәскә атҡанда киләм. Ул саҡта Урал хаҡында ҙур шиғыр тыуасаҡ!“ — тип, хыялдарын һөйләп килә.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Урал хаҡындағы ул шиғыр яҙылмай ҡалды. Шәйехзада Бабич Преображенскийға (Йылайыр) етеү менән ҡулға алынды һәм башҡорт ҡанын көçәгән йыртҡыс ҡыҙыл командирҙар тарафынан йөҙәрләгән башҡорт ирҙәре менән бергә Йылайырҙың таш майҙанында вәхшиҙәрсә язалап үлтерелде.

Тереләр үлгәндәрҙең күҙен яба, үлгәндәр тереләрҙең күҙен асып китә. Башҡорт халҡы үҙенең һәләк булған һөйөклө шағирының күҙҙәрен ябып, уны тәрбиәләп ҡуя алманы, бәхилләшеү мәлендә башынан һыйпай ал-

маны. Уны залимдар ат ҡойроғона тағып, ҡылыс менән тураҡлап язаланы.

Тереләр үлгәндәрҙең күҙен яба, үлгәндәр тереләрҙең күҙен асып китә. Был боронғо хәҡиҡәтте һәр мәрхүмгә ҡарата әйтеп булмай.

Бабич иһә үҙенең янып йәшәүе менән генә түгел, азатлыҡ яулау юлында һәләк булыуы менән дә күптәрҙең күҙен асып китте, көрәштең еңел булмаясағын, мәкерҙең, яуызлыҡтың, хыянаттың аҙым һайын аңдып торасағы тураһында иҫкәртеп китте, уяулыҡҡа, берҙәмлеккә саҡырып китте.

Ошондай ауыр юғалтыуҙарҙан, ҡаты һабаҡтарҙан һуң күҙҙәре ныҒыраҡ асылған, күп нәмәне яңыса күрергә өйрәнгән милләттең күҙен һаман да ябырға, уны һуҡырайтырға тырыштылар.

Бабич ғүмере буйы туған халҡы менән нығыраҡ ҡушыла барҙы, уның ҡыуанысына һәм йыуанысына, шатлығына һәм һыҙланыуына әйләнде. Уның яҙмышында милләттең ғорур һәм аянысլы яҙмышы сағылды. Бабичтың үлеме халҡыбыҙҙың йөрәк яраларын тағы ла нығыраҡ һыҙландырҙы. Уның янып йәшәүҙәре лә, кисергән фажиғәләре лә осраҡлы түгел, улар милләт кисергәндәрҙең бер нөктәгә килеп тупланыуы, ут йомғағына әйләнеүе ул.

Йәне фәрештәләр янына осоп киткәндән һуң да Бабичҡа тынғы булманы. Ил күңеленең иң түрендә һис бер ел-дауыл тейҙермәй ҡәҙерләп һаҡланырға тейешле изге исеменә күпме тапҡырҙар ҡара яғылды, яҡты рухы күпме рәнйетелде. Йылайыр урамында һәләк булған Шәйехзада артабан да нахаҡ язаларға дусар ителде. Шағирҙы бер генә түгел, күп тапҡырҙар атырға, бер генә түгел, күп тапҡырҙар аҫырға, бер генә түгел, күп тапҡырҙар ҡылыстан үткәрергә, үҙен генә түгел, ижадын, рухын юҡ итергә тырыштылар.

Бәхет билдәһе булған йөҙлөк менән тыуған Шәйехзада Бабичтың яҙмышы фажиғәле булды, ләкин бәхетһеҙ булманы. Яҙмышы тарихи юлдарҙың ни сана, ни арба сағына тура килде, ә шағир, боҙҙан боҙға һикереп булһа ла, алға барыуынан туҡталманы. Темеҫкенеп, быҫҡып, ярты-йорто тойғолар менән көн күрмәне, йөҙ йылдарға бер килә торған яҙмыш менән йәшәп китте.

Әйтерһең дә, халҡыбыҙҙың яҡты өмөттәрен, зиһененең, рухының туҡтауһыҙ эҙләнеүҙәрен, дәртен һәм илһамын, талантын һәм йомартлығын, азатлыҡ һөйөүсән ғорур холоҡ-тәбиғәтен, тарихи юлдарҙағы ҡаҙаныштарын һәм ҡыйралыштарын, ниндәй мәкерле ҡамауҙар, көнсөл ҡоршауҙар эсендә милләтебеҙҙең өҙгөләнеүҙәрен, уңдан да, һулдан да ниндәй ғәҙелһеҙлектәргә, күпме ҡаршылыҡтарға килеп бәрелеүен үҙ ғүмерен ҡорбан итеп, үҙ йәнен фиҙа ҡылып аңлатып бирер өсөн килгән был яҡты донъяларға бөйөк шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич!

Ғорур Бабич, ҡаһарман Бабич, ҡанатлы Бабич!
Ғорур халҡыбыҙ, ҡаһарман халҡыбыҙ, ҡанатлы халҡыбыҙ!